## Донъяла



**НИГЕРИЯ.** Өс йәшлек ҡыҙ бала Ҡорьән-хафиз булыуы менән Нигерия халҡын таң ҡалдырҙы.

Шуны ла әйтергә кәрәк, былтыр Сәғүд Ғәрәбстанынан 3 йәше лә тулмаған бала халыҡты Ҡорьәнде яттан белеүе менән һоҡландырғайны. Тик Ҡорьән теле - уның тыуған теле, ә әлеге ҡыҙыҡай өсөн ғәрәп теле барыбер сит тел бит әле. "Дөрөҫөн әйткәндә, мин бер нисек тә аңлата алмайым. Был яҡшылығы өсөн фәҡәт Аллаһы Тәғәләгә шөкөр итәм, - ти ҡыҙҙың әсәһе Сәйәдә Мәймүнәтү Шәйех Даһиру. - Бөтәһе лә Аллаһтың мәрхәмәте". Өс йәшлек Руккаяту Фатаху Үмәр шәйех Даһиру Усман Баучи асҡан мәҙрәсәлә белем ала. "Уҡыусылар айырым синыфтарға бүленгән ҙур бер залда шөғөлләнә", ти Мәймүнәтү ханым. Ул үҙе лә ошо мәҙрәсәлә уҡыта. "Баламды һәр саҡ арҡаға йөкмәп үҙем менән алып килә торғайным. Ул аяттарҙы уҡыусылар ыңғайына ҡабатлай башлаған, ҡайһы берен ятлап алды. Шунан ятлау дәрестәренә йөрөй башланы һәм Ҡорьәнде тулыһынса ятланы ла ҡуйҙы".

Бәләкәс Руккаяту мәҙрәсәлә иртәнге етенән киске алтыға тиклем үҙ теләп ҡалыр булған, сөнки уға Ҡорьән аяттарын ҡабатлау ныҡ оҡшаған.

Мәймүнәтү ханымдың үҙенең дә 12 йәшендә Ҡорьән-хафиз булыуын билдәләргә кәрәк. Ҡыҙҙарын мәктәпкә иртәрәк биреүҙе ире менән бергәләп хәл итәләр, "Улар 21 быуатта йәшәй һәм беҙгә ҡарағанда белем алырға иртә өлгөрәләр", - ти улар.

**СӘҒҮД ҒӘРӘБСТАНЫ.** Әл-Мулла ханым шәхси эшҡыуарлыҡ өлкәһендә Сәғүд Ғәрәбстанының "иң яҡшы генераль директоры", тип табылды. Уңған ханымды Американың етәкселек үҫеше федерацияһы GCC сауҙа палатаһы федерацияһы генераль секретариаты һәм Малайзияның "Халыҡ-ара лидер" ойошмаһы берлектә бүләкләне.

"Әл-Итихад" гәзите яҙыуынса, Бәҙриә Әл-Мулла консалтинг компанияһын үҫтереп һәм бер нисә компанияны берләштереп, тиҙ арала уңышҡа өлгәшеүсе йүнселдәрҙең береһе.

Был наградаға егерме белгестән торған жюри төрлө илдән утыҙ дәғүәсене тәҡдим иткәйне. Бәҙриә Әл-Мулла Яҡын Көнсығыштан һәм Төньяҡ Африканан тәҡдим ителгән берҙән-бер кандидат булғанын да әйтергә кәрәк.

**ОМАН ЙЫЛ АҘАҒЫНДА ДӘҮЛӘТ СУКУКЫ СЫҒАРАСАҠ.** Оман бюджет сығымдарын финанслар өсөн 200 миллион риалға (520 миллион доллар) ислам һәм исламдыҡы булмаған облигациялар сығарырға ниәтләй. Был турала солтанаттың үҙәк банкы етәксеһе Хәмуд Сангур Әз-Зәджәли хәбәр итә. Был сараның ни рәүешле атҡарыласағы ентекләп хәбәр ителмәй, ләкин шуныһы мәғлүм, сукук оман валютаһында сағылдырыласаҡ. Шуны ла әйтергә кәрәк, Оман быға тиклем сукук сығарғаны юҡ ине, ә солтанатта ислам финанс секторының эшләй башлауына бер нисә ай ғына. "Әлеге мәсьәләне өйрәнеүсе комитет булдырыласаҡ, һәм ул сукук сығарыу варианттарын ҡараясаҡ. Беҙгә ҡайһы бер мөһим йүнәлештәргә асыҡларға ғына кәрәк", ти Әз-Зәджәли.

# КИТӘБУТ-ТӘРБИӘ

## (Тәрбиә китабы)

Ҡәйүм НАСЫРИ

### Егерменсе тәрбиә

Мысыр ҡалаһында ике әмирзада бар ине. Береһе ғилем өйрәнде, береһе мал йыйҙы, бай булды. Уның береһе - ғүләмә, ә икенсеһе - финанс министры булды. Бәй, был бай булғаны ғалим булғанына кәмһетеү күҙе менән ҡарар ине үә әйтер ине: "Мин солтанлыҡҡа ирештем, һин һаман бер нөктәлә тораһың (үҙгәрмәгәнһең)", - тине. Ғалим әйтте: "Эй туғаным, Аллаһ Тәғәләгә шөкөр итеү минең тарафымдандыр, сөнки мин пәйғәмбәр мираҫын таптым, әммә һин фирғәүен мираҫын алдың", - тине. Эй уғыл, бынан һиңә тәрбиә шулдыр, ҡәнәғәт булыу кәрәк. Ғилем, әлбиттә, пәйғәмбәр мираҫылыр.

### Егерме беренсе тәрбиә

Ғәжәм (сит ил) падишаһтарынан бер падишаһ бер оҫта табипты пәйғәмбәр ғәләйһиссәләм хеҙмәтенә ебәрҙе. Ул табип нисә йылдар ғәрәп илдәрендә торҙо. Һис бер кеше быға: "Миңә дауа ҡыл", - тип янына килмәне. Бер көн ул пәйғәмбәр ғәләйһиссәләм янына килеп хәбәр ҡылды. "Фәлән ҡәҙәр көндәр бында торам, һис кем миңә илтифат ҡылған (килгән) кеше юҡ", - тине. Пәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм әйтте: "Был халыҡтың ғәҙәте шулдыр: ашайһылары килмәй тороп - һис тәғәм ашамаҫтар, үә тамаҡтары туймаҫ элек кул тартырҙар, йәғни тағам туйғансы ашамаҫтар", - тине. Табип әйтте: "Сихәтте булдырмаҡ нәмә шул да баһа", - тип ер үпте лә китте. Инде ҡорһағың тулғансы ашама, сихәттә булырһың, аҙ менән ҡәнәғәт ҡыл.

### Егерме икенсе тәрбиә

Бер әҙәм ғүмерендә нисә мәртәбә тәүбә ҡылды, ләкин тәүбәһен һындырҙы. Аҡһаҡалдарҙан берәүгә быны хәбәр ҡылды: "Тәүбәмде тота алмайым, ғәжизмын", - тине. Ул аҡһаҡал әйтте: "Һин күп ашарға ғәҙәтләнгәнһең, нәфсеңде (теләгеңде) тәрбиә ҡылһаң, ул шулай, бер вакыт һине еңер", - тине. Бәй, эй уғыл, нәфсең һимергән һайын, ул һине һәләкәткә тартыр. Донъяла баһадир шул кешелер - нәфсеһенә хужа булған.

### Егерме өсөнсө тәрбиә

Ишеттем, бер фәкир дәрүиш аслыҡ утына көйгән, бер-береһе өҫтөнә ямалған кейем кейгән... Дуҫтарының береһе әйтте: "Ниңә ултыраһың? Ошо калала фәлән кеше бар, мохтаждарҙың хәжәтен үтәйҙер. Әгәр һинең дә хәлеңде белһә, хәлеңә шәфҡәт ҡылыр ине", - тине. Ул фәкир әйтте: "Тик тор, фәкирлектә үлмәк, кешегә хәжәт менән бармаҡтан хәйерлерәктер", - тине.

### Егерме дүртенсе тәрбиә

Бер фәкир бер ваҡыт бик мохтаж булып ҡалды. Дуҫтарының береһе әйтте: "Фәлән кеше бик бай үә ниғмәт эйәһе әҙәмдер, әгәр һинең мохтаж икәнеңде белһә, шаят шәфҡәт ҡылыр", - тине. Был фәкир әйтте: "Бәлки шулай булыр ине, әммә мин уны белмәйем, - тине. Ул кеше әйтте: "Әйҙә, мин үҙем күрһәтәйем уны һиңә", - тине. Бергә барҙылар. Был фәкир, барып еткәс, ишек алдында берәүҙе күрҙе: ирендәре һалынған, күңелһеҙ үә хафала ултыра. Был фәкир бер һүҙ әйтмәйсә ҡайтып китте...

### Егерме етенсе тәрбиә

Муса ғәләйһис-сәләм бер фәкирҙе күрҙе: ялanғас, кейеме юҡлыҡтан, ҡомға күмелеп ятҡан. Фәкир әйтте: "Йә, Муса, доға ҡыл - Аллаһ Тәғәлә миңә байлыҡ бирһен, был фәкирлегемә сыҙарлыҡ хәлем ҡалмаһы", - тине. Муса ғәләйһиссәләм доға ҡылды. Аҙ ваҡыт эсендә Аллаһ Тәғәлә теге фәкирҙе бай итте.

Бер ҡәҙәр ваҡыт үткәс, Муса ғәләйһис-сәләм уның менән тағы осрашты. Бер ерҙә күп халыҡ тупланған, шау-гөр килә. Муса ғәләйһис-сәләм һораны: "Был ниндәй тауыш, нимә булды?" Әйттеләр: "Был фәлән кеше, күп эсеп иҫергән дә, һуғышып, бер кешене үлтергән. Уны, хөкөм итеп, яза майҙанына алып баралар", Муса ғәләйһис-сәләм Аллаһ Тәғәләнең хикмәттәренә хайран ҡалды. "Ҡара инде, уйламай доға ҡылғанмын", - тип үкенде, тәүбә итте.

### Егерме һигеҙенсе тәрбиә

Шәйех Сәғди хикәйәт ҡылған: "Замандың үҙгәреүенән Һанүз (Һаман) илағаным үә шикәйәт ҡылғаным юҡ ине. Мәгәр бер ваҡыт аяғыма кейергә юҡ ине. Аяҡтарым ялanғас, Күфә мәжлесенә килдем. Бер аяҡһыҙҙы күрҙем, үә Аллаһ Тәғәләгә шөкөр үә сәнә ҡылдым, үә аяғым ялanғаслығына сабыр ҡылдым", - тине. Инде, эй уғыл, бынан һиңә бер аҙ тәрбиә бирәйем.

### Егерме туғыҙынсы тәрбиә

Бер көсһеҙ, зәғиф балыксының ҡармағына бик ҙур балыҡ эләкте. Балыксы ул балыкты тартып сығара алманы: кеүәте етмәне. Балыҡ ҡармаҡты өҙөп ҡасты. Башка балыксылар быны күреп, әрләнеләр һәм шелтәләнеләр: "Һи, асыҡ ауыҙ, ҡармағыңа эләккән шундай балыҡты ысҡындырҙың!" - тинеләр. Балыксы әйтте: "Эй, егеттәр, миңә насип булмаған булғас, мин ни эшләй алам? Һәм балыҡтың да көнө бөтмәгән", - тине.

Балыксы - насип булмаған балыҡты тота алмай. Балыҡтың әжәле етмәнә, ҡармаҡҡа эләкмәй. Шулай инде, халыҡ араһында гел фәкир шелтәгә тарый.

### Утыҙынсы тәрбиә

Бер сауҙагәр үҙенең сауҙаһында мең алтын зарар итте үә улына әйтте: "Эй, уғыл, был серҙе кешегә әйтергә кәрәкмәй", - тине. Улы әйтте: "Эй ата, фарман һинеке. Үә ләкин был серҙе йәшереүҙән һеҙгә ни файҙа булыр?" Атаһы әйтте: "Тағы ике ҡайғы булмаһын тип әйтәм, бер ҡайғыхазинабыҙ кәмеүе, икенсе ҡайғы - күршеләремдең шәмәтәһе", - тине. Эй уғыл, шәмәтә тигән нәмә мәзмүм холоҡтыр, шәмәтәнән һаҡлан, йәғни берәүҙең ҡайғыһын йәки зарарын күреп, йәки ишетеп, һөйөнмәктә шәмәтә тиҙәр.

### Утыҙ беренсе тәрбиә

Аҡыл эйәһе үә фазилиәтле бер егет бар ине. Әммә нисә мәртәбә ғалимдар үә аҡыл эйәләре араһында ултырыр, бер һүҙ һөйләмәҫ ине. Атаһы әйтте: "Эй улым, белгәнеңде ниңә һөйләмәйһең?" - тине. Улы әйтте: "Ҡурҡам, әгәр белгәнемде кешегә белдерһәм, ғалим икән тип, минең белмәгән нәмәмде һорарҙар ҙа оятлы булырмын", - тине. Эй уғыл, был хикәйәттән һиңә файҙа шулдыр, бер нәмәне тамам нигеҙенә төшөнөп белмәһәң, телеңә килтермә.

### Утыҙ өсөнсө тәрбиә

Бер падишаһ үҙенең улын остазға ғилем уҡымаҡҡа бирҙе. Остаз күп ижтиһад менән падишаһтың улына тәғлим бирҙе, үә яман нәмәләрҙән тыйҙы, үә ҡайһы саҡ ҡыйнаны. Был бала, тәкәтһеҙләнгәнән, атаһына ҡайтып әйтте, тәнен асып күрһәтте. Атаһы быға хафаланып остазды саҡыртты, әйтте: "Эй остаз, ғәүәм (ябай халыҡ) балалары был ҡәҙәр яфа ҡылмайһың икән, беҙҙең балабыҙға был ҡәҙәр яфа үә йәбер күрһәтәһең, ни сәбәптер?" - тине. Остаз әйтте: "Эй падишаһ, уның өсөн, ғәүәм балаларына иғтибар юҡтыр; әммә падишаһ балалары яфа нимә, йәбер икәнен белеп үҫһендәр. Падишаһ булғандан һуң, йәбер үә золом ни икәнен белеп, һаҡланһын. Әгәр падишаһтан үә падишаһ балаларынан йәбер үә золом башланһа, (халыҡты иҙеп) илдән илгә йөрөтөрҙәр". Үә олуғ кешеләрҙең үә байҙарҙың балаларын, тәрбиә үә тәртип биреүҙә ғәүәм балаларынан артығыраҡ ҡарарға тейеш, йәғни уҙҙырмайса, тығыҙыраҡ тотоп тәрбиә ҡылырға тейеш, бай тип, иркенлек ҡылырға ярамай.

### Утыҙ дүртенсе тәрбиә

Эй, уғыл, балаларға тәғлим бирһәң кесерәк ваҡытта бик ижтиһад ҡыл, "Әл-ғилме фиссағыри кә нәкаши фил-хәжәри" (бала сакта алған ғилем ташҡа яҙылған биҙәк һымаҡ) мазмунынса (мәғәнәһенсә) сыбыкты нескәрәк сағында бөгөү уңайлыраҡтыр. Кесерәк ваҡытта күп фәндәргә төшөндөрмәк кәрәк, математиканы, аҙ-аҙ белдермәк кәрәк. Әммә был балаларға һабаҡ уҡытыу хосусында һиңә яҡшыраҡ тәрбиә бирәһем бар.

### Утыҙ бишенсе тәрбиә

Бер падишаһ улын бер остазға бирҙе, әйтте: "Эй остаз, был бала һинекелер, үҙ низамыңса яҡшы тәғлим бир", - тине. Бәй, остаз был падишаһ балаһына башҡа балалар менән бер дәрәжәлә белем бирҙе. Ләкин падишаһ балаһы ғәүәм балалары еткән дәрәжәгә етмәне. Бәй, падишаһ шелтәләмәксе булды. Остаз әйтте: "Эй падишаһ, тәрбиә бирҙер, ләкин һәләтлек башҡалыр", - тине. Бәй, эй уғыл ғәүәм балалары күберәк бай балаларынан өлгөрәрәк үә зирәгерәк киләләр. Мин һиңә шуның өсөн әйтәм, бай балаларына артығыраҡ сарыф ҡылмаҡ кәрәк, улар иркә булалар.

### Утыҙ алтынсы тәрбиә

Бер ғәрәп үҙенең улына әйтте: "Баҡ, улым, ҡиәмәт көнөндә һинән: "Һин кем улы?" - тип һорамаҫтар, бәлки: "Ни ғәмәл килтерҙең?" - тип һорарҙар", - тине.

### Утыҙ етенсе тәрбиә

Шәйех Сәғди риүәйәт ҡылған, бер фәкир әҙәм бар ине, ғүмерендә бала күрмәне, Аллаһ Тәғәләнән һораны: "Әгәр улым булһа, ошо өҫтөмдәге кейемемдән башҡа, милкемдә бер нәмә юҡтыр, уны һатып фәкирҙәргә өләшер инем", - тип нәзер ҡылды. Бәй, Аллаһ Тәғәлә уға бер ул рузи (насип) ҡылды. Бик шатланып, әйткән нәзерҙе тотто, фәкирҙәргә хәйер ҡылды. Бер нисә йылдан, йәнә Шам ҡалаһынан ҡайтҡанда, юлым шул ҡалаға тура килеп, ул кешене һораштым. Әйттеләр, зиндандалыр. "Ни сәбәпле зинданға төштө?" - тип һораным. "Улы бер ваҡыт хәмер эсеп һуғышып, бер әҙәмде үлтергән һәм ҡаланан ҡасҡан ине. Улын тапмағас, улы урынына атаһын зинданға һалдылар". Эй уғыл, ошо заманыбыҙҙа ла быға оҡшашлы ваҡиғалар барҙыр, ниндәй байҙар бар, балалары йәш үә кес кенә заманда, ҡырк-илле мең тәңкә менән сауҙа ҡылыусылар. Балалары үҫеп еткәс, фәкир үә мохтажлыҡҡа ҡалалар. Ул ниҙәндер? Әлбиттә, кес кенә ваҡытта балаларына яҡшы тәрбиә ҡыла белмәгәнлектәндер.

### Утыҙ һигеҙенсе тәрбиә

Бер олуғ ғалим әйтте: "Һәр бер дошман, уға яҡшылыҡ иткән һайын, дошманлығын кәметә. Тик нәфсеһе генә, үҙенең талабын ҡәнәғәтлендергән һайын, һиңә ҡаныға төшә".

**(Дауамы бар).**
**"Дәғүәт" нәшриәте.**